## Донъяла



**БӨЙӨК БРИТАНИЯ.** 2011 йылғы иҫәп алыу менән сағыштырғанда, Бөйөк Британияла инглизандар араһында Ислам динен тотоусылар арта бара. Был турала Милли статистика мәғлүмәте хәбәр итә. Аҙаҡҡы ун йылда насраниҙар 12 процентка кәмеп, хәҙер улар илдә ни бары 59 процент тәшкил итә. Был һан тағы ла кәмерәк булыр ине, тик һуңғы йылдарҙа миллион самаһы поляк католиктары һәм Нигерия инжилсыларының көсеп килеү иҫәбенә генә артҡан.

Йәнә лә, ошо ваҡыт эсендә илдә атеистар һаны 14,8 процентҡа күбәйгән. Ә 10 йәштән 18 йәшкә тиклемге кешеләр араһында һәр унынсы үҙен мосолман, тип атай. **"Independent"** гәзите насрани динен тотоусылар ҡартая, был диндең тормоштан айырылған булыуы арҡаһында, йәштәр араһында уны тотоусылар һаны артмай, тип белдерә. Ошоларҙан сығып, әлеге баҫма бер ун йылдан ислам Бөйөк Британияла төп дингә әйләнәсәк, тип фаразлай.

* * *



**СУДАН.** Судан мосолман ғәләмдәре берлеге хөкүмәткә илдәге һылау (массаж) салондары эшмәкәрлеген ныҡлы күҙәтеүгә алыу зарурлығын белдерҙе. Улар әйтеүенсә, массаж салоны исеме аҫтында мосолмандарҙың әхлағына ҡаршы килә торған эштәрҙе йәшереүселәр булыуы ихтимал. Судан мосолман ғәләмдәре берлеге башлығы Мөхәммәд Салих хөкүмәткә бындай салондарҙың һәм магазиндарҙың эшмәкәрлеген тикшерергә, мосолмандарҙың тойғоларын мыҫҡыл итеүҙән һаҡлау өсөн, закондың эшләгәндәрен яҙыбрға саҡырҙы. Артабан ғәләм фикх йәһәтенән һылауҙың ниндәй осраҡта рөхсәт ителгәнен аңлатты: "Һылау - табип һәм белгес күҙәтеүе аҫтында терапевт алымы булараҡ, рөхсәт ителә. Унда ла бер шарты бар, ҡатын-ҡыҙ ир-атҡа массаж яһарған тейеш түгел, ә ҡатындарға ирҙәр массаж яһай алмай".

Мосолман ғәләмдәре берлеге кәңәшсе булып ҡына сығыш яһай ала, ә ниндәй ҡарар сығарыуҙы иһә хөкүмәт үҙ хәл итә.

* * *

Тажикистандың ғәләмдәр берлеге башлығы Саидмөккәрәм Абдулкодирзода Дүшәнбелә яңы мәсет 40 процентка һалынып бөттө, тип хәбәр итте. Был мәсет, Мәккә һәм Мәҙинәнән ҡала, ҙурлығы буйынса үҙәк Азияла өсөнсө урында буласаҡ. Мәсет Дүшәмбелә 2011 йылдың октябрендә, йәғни Эмомали Рахмон үҙе экскаваторға ултырып, уның сүмесе менән буласаҡ мәсет нигеҙенең тәүге ҡатламын ҡаҙып алғандан һуң, һалына башланды, тип иҫәпләнә.

Проекттың хаҡы - 100 млн. доллар. Уның 70 процентын Катар бағымсылары үҙ өҫтөнә алған. Ә ҡалғаның Тажикстан Хөкүмәте ҡаплаясаҡ.

# КИТӘБУТ-ТӘРБИӘ

## (Тәрбиә китабы)

Ҡәйүм НАСЫРИ

### Алтмыш икенсе тәрбиә

Эй уғыл, ҡәрҙәштәрсә аралаш, яттарса мөғәмәлә ҡыл. Йәғни алышта-биреште: "Был - ҡарандаш кеше", - тип өҫтәнлек ҡылма. Үә даһи алышта-биреште: "Мин ҡарындаш кеше лә баһа, аҙыраҡ өҫтөнлөк ҡыл", - тимә. Сөнки мал башҡа, ҡарындашлыҡ башҡа, был хосуста яҡлашыу асыу тотоуға үә дошманлыҡҡа сәбәпсе булалыр. Әгәр яҡлау ҡылмыш кәрәк булғанда ла сауҙалашыу тамам булғас ҡылмаҡ тейеш.

### Алтмыш өсөнсө тәрбиә

Тел йәрәхәте ҡылыс йәрәхәтенән әсерәктер үә ямараҡтыр, йәғни телдән әйтелгән әсе үә ҡәбәхәт һүҙҙәрҙең әҙәмгә әҫәре тәндә бысҡы менән киҫкәндән дә әсерәктер. Эй уғыл, һис бер кешегә телең менән йәрәхәт һалма, йәғни яман һүҙ әйтмә. Әҙәмдең йәненә тейә торған һүҙ әйтмә. Әммә бер һүҙҙе һин ҡулай хисаплап әйтерһең дә, кешенең күңеленә бик ҡаты тейер. Эй уғыл, ҡаты һүҙле булма. Изге холоҡ менән үә йомшаҡлыҡ менән татлы һүҙҙәр һөйләшмәк - ризыҡтың аҫҡысылыр. Яҡшы үә йомшаҡ һүҙгә әҙәмдең күңеле ирееп китәлер. Кешегә ашығып һүҙ әйтһәң үә ашығып яуап бирһәң, һис бер хата һүҙ садир (пәйҙә) булмайынса булмаҫ.

### Алтмыш дүртенсе тәрбиә

Һәр эштең ахырын фекер ҡылып үә уйлап эш ҡылған кеше бәлә үә ҡайғынан имен булыр, үә сәләмәт ҡалыр. Уйламайынса, ашығып эш ҡылған кеше һис бер тәүбә үә үкенес тартмай ҡалмаҫ.

### Алтмыш бишенсе тәрбиә

Эй уғыл, бер ергә керһәң, әүүәл нисек итеп сығаһыңды уйламаҡ кәрәк. Бер ишектә асһаң, нисек итеп ябырмын тип уйламаҡ кәрәк. Йәғни бурысҡа керһәң, нисекк итеп түләрмен тип, әүәл түләүендә иҫкә төшөр. Үә даһи бер эшкә керешһәң, нисек итеп тамам ҡылырмын тип, тамам ҡылаһыңды иҫенә төшөр.

### Алтмыш алтынсы тәрбиә

Ялғансылыҡ менән аты (исеме) сыҡҡан кеше һәр ни ҡәҙәр тоғро һүҙ әйтһә лә, ышандырмайҙыр. Бер мәртәбә ялғансылығың һиҙелһә, ысын һүҙеңә лә ышанмаҫ булырҙар...

### Алтмыш етенсе тәрбиә

Әгәр ваҡ түбән йәнле (рухлы) кешеләр үә наҙандар олуғтар дәрәжәһенә ирешһәләр, олуғтар үә кешелекле әҙәмдәр һәләкәт дәрәжәһенә төшөрҙәр, йәғни яҡшы күңелле әҙәмдәрҙең ҡәҙере ҡалмаҫ. Эй уғыл, яман холоҡло үә тар холоҡло кешеләрҙән ҡас үә йыраҡ кит, күркәм холоҡло кешеләрҙән айырылма үә әхлағе күркәм менән тиндәш бул.

### Алтмыш һигеҙенсе тәрбиә

Эй уғыл, әйткән һүҙ атҡан уҡ кеүектер, һәр бер һүҙҙе уйлап һөйләшергә кәрәк, ауыҙындан сыҡҡан кире ҡайтмаҫ. Гонаһлы була тороп та, тәүбәгә ашыҡмаған кеше - гонаһы кескенә булһа ла ҙурға әйләнер.



### Алтмыш туғыҙынсы тәрбиә

Аҡыл менән тотһаң үә сарфы ҡылһаң аҙ нәмә лә бәрәкәтле булалыр, үә уйламайынса тотоп исраф ҡылһаң, күп нәмә лә етмәйҙер...

Эй уғыл, аҡыллы кеше шулдыр, ҡулындағын һаҡлар, бөгөнгө эшен иртәгәгә ҡалдырмаҫ.

### Етмешенсе тәрбиә

Ғизәтлелек үә олуғлыҡ - ҙур тырышлыҡ менәндер, сереүсе тупраҡ менән инмәҫтер, йәғни оҙон буй үә олуғ һаҡал, үә йыуан ҡорһаҡ менән түгелдер. Былар барыһы ла сереп тупраҡ булаһы нәмәләр, олуғлыҡҡа илтә торған нәмә түгелдер. Ҙур тырышлыҡтан үә күркәм әхләҡтән яланғас булып та, буй менән үә ғәмәл, үә ҡиәфәт менән олуғлыкты өҫтәмәк - ғәйәт ахмаҡлыҡтыр. Үә даһи олуғлыҡ үә игелеклелек тиган ғилем үә әҙәп менәндер үә күркәм әхләк менәндер. Юғиһә, ҡул өҫтөндә яҡшы аттар юрғалатыу бер ҙә олуғлыҡҡа үә хөрмәткә илтмәйҙер. Эй уғыл, әҙәм булайым тиһәң, бындай юҡ эштәргә ихлас ҡуйма.

### Етмеш беренсе тәрбиә

Аҡыл әйәләре менән үә ғилем әһеле менән аралашыу үә сер ҡылмаҡ күңелдәрҙе тергеҙер. Үә ғилем үә мәғрифәт әһеле менән сер ҡылмаҡ - еҫле май һатыусылар янында тормаҡ менән берҙер, гәрсә һиңә ул еҫле май бирмәһә лә, хуш еҫе танауыңа керәлер. Наҙандар үә яуыҙдар менән сер ҡылмаҡ - тимерселәр янында тормаҡ менән берҙер: осҡондары һиңә килеп сәсрәр, шулай уҡ наҙандың наҙанлығы әҫәр итәлер...

### Етмеш икенсе тәрбиә

Эй уғыл, кешенең эшендә йәки һүҙендә хата күрһәң: "Һай хата ҡылдың, былай кәрәк!" , - тип хатаһын төҙәтмә, сөнки һинән ғилем алыр һәм һине дошман тотор. Был эш үҙ башыма күп килгәне бар, үә нисә мәртәбә кешенең хатаһын үҙгәртеп үкенгәнем бар.

### Етмеш өсөнсө тәрбиә

Әҙәмдең тәбиғәте шулайҙыр, мәнфәғәтен (файҙаң) күргән кешегә мөхәббәт итер, үә зарарын күргән кешегә рәнйер. Эй уғыл, кешегә мәнфәғәт итергә ҡулындан килмәй икән, бары зарарынды ирештермә. Асыҡ йөҙлә, татлы һүҙле бул, дуҫың күп булыр.

### Етмеш дүртенсе тәрбиә

Эй уғыл, мал табыуҙың юлдары бик күптер. Ниндәй генә юл булмаһын, малды хәләлдән табыу фарыҙдыр. Хәләлдән килгән мал - тоторокло булалыр. Харам мал иһә әҙәмгә йоҡмайҙыр; тиҙ ҡулынан китер, яуаплылығы һәм ауырлыҡтары ғына һиңә ҡалыр. Әммә хәләлдән килгән малыңды һалҡап тот, харам ергә сарыф итмә. Малды һаҡлау - малды табыу һәм йыйыуҙан ауырыраҡ. Һаҡлап тота белмәгәндәрҙе сәбәпле ни ҡәҙәр байҙар малһыҙ ҡалдылар.

### Етмеш бишенсе тәрбиә

Эй уғыл, малдың килеүенә ҡарап байлығыңды тот, килеүенә ҡарағанда сығымдарың кәмерәк булһын, донъяла һис мохтаж булмаҫһың. Һәр көн аҙмы-күпме сығымдарыңдан артҡаны сәрмаяңа (йыйылған аҡса) ҡушылһын, дәүләтең һаман артыр. Имде малың күп булған тәҡдирҙә, фәҡир ваҡытыңды онотма, ни тиклем фәҡир ваҡытыңда: "Был нәмә был көнгә етһен", - тип сарыф ҡыла инең, бай булғас, шулай уҡ хисап менән тот. Сығымдарын үлсәү менән тотҡан кеше мохтаж булмайҙыр.

### Етмеш алтынсы тәрбиә

Үә әгәр бер дуҫың йәки ҡарындашың малын йәки хеҙмәтен һиңә тапшырһа үә аманат итһә, үҙ малың кеүек итеп һаҡла, үә үҙ хеҙмәтең кеүек итеп башҡар. Ул сәбәпле Аллаһ Тәғәлә һинең малыңа бәрәкәт бирер, үә халыҡ араһында аманатҡа тоғро булып мәшһүр булырһың. Әммә, эй уғыл, малындан бер нәмәне бер кешегә аманат ҡуйыйм тиһәң, исраф итеүсе әҙәмгә аманат ҡуйма. Даһи отош уйын уйнаусы кешегә үә хәмер эсеүсегә аманат ҡуйма.

### Етмеш етенсе тәрбиә

Үә даһи, эй уғыл, бурыс итергә һәүәҫ итмә. Үә файҙа менән алма, үә заклад биреп аҡса алма. Сөнки был эштәр әҙәмде хурлыҡҡа төшөрөр. Сөнки кемгә бурыслы булһаң, уға ҡол булырның. Үә даһи кешегә бурысҡа аҡса бирмә, хосусан дуҫына бирмә. Сөнки дуҫың ваҡытында үҙе белеп бирмәһә, һорарға тура килер, һораһаң рәнйер, арағыҙҙа дуҫлыҡ бөтөр. Дуҫыңды дошман итмәк яһилдар эшелер.

### Етмеш һигеҙенсе тәрбиә

Эй уғыл, әгәр бер кеше һиңә аманат ҡуйырға теләһә, ҡабул итмә, үҙеңә бәлә йөкләмә. Сөнки аманат һаҡлау - бер бәләләр, өс хәүефле яғы бар. Берене - аманат нәмәне үҙ малдарыңдан артығыраҡ һаҡлап интегәһең һәм хужаһына ҡайтарып бирәһең. Ул һине ҡомһоҙ кешегә әйләндереп, алманым тип баш тартырға мәжбүр итеүе бар. Йәки, ул юғалып, ауыр хәлдә һәм оятҡа ҡалырың. Ҡаза күрҙем, юғалды тиһәң дә ышанмаҫтар. Эйе, аманат һаҡлауҙары еңел эш түгел. Әгәр ҙә инде, аманатты ҡабул итһәң, яҡшы һаҡла һәм хыянат итмә. Әгәр бераү үҙеңә һатырға берәй нәмә аманат ҡуйһа, һатыу менән, тотҡарһыҙ, аҡсаһын эйәһенә тапшыр. Әгәр быны үтәй алмайһың икән, аманат итеп алма; йәки һатҡас, фәләнсә ваҡыттан һуң аҡса ал.

### Етмеш туғыҙынсы тәрбиә

Һөнәрле ҡол үлмәҫ. Эй уғыл, һөнәрең ҡайһы булһа ла, үҙең яҡшы булһаң, аҡса килтерәләр. Әммә һөнәрләнең яҡшыһы, әгәр ҙә аҙыраҡ аҡсаң булһа, сауҙа ҡылмаҡ яҡшы кәсептер. Ләкин хәләл сауҙа ҡылмаҡ бик ситен эштер. Әммә иҗтиһад ҡыл, эй уғыл, хәләлдән һатыу ит. Хәләл сауҙа менән хасил иткән бер тинең ун тин харамдан бәреп йығыр. Сауҙа малы алһаң, малдың яҡшыһын ал, сөнки яҡшы нәмәнән файҙа өмөтө бар, насар нәмәң һатылмай ҡалһа, зарар булыр.

### Һикһәненсе тәрбиә

Һәм тағы, эй уғыл, әҙәм һәм хайуан ризыҡы булған нәмә менән һатыу-алыу итмә. Йәғни икмәкте, ашлыкты арзан ваҡытта һатып алып, ҡиммәтләнгәс һатырмын тип йыйып һаҡлау харам. Быны спекуляция тиҙәр. Һәм тағы, эй уғыл, һатыу-алыу эшендә ялған һөйләмә, ант итмә. Һатыуҙы-алыуҙы еңеләштерер. Әммә башҡа кешегә шәрик (компаньен) булып сауҙа итеүҙән һаҡлан: донъяла ғәҙел кеше бик аҙ, ыҙғыштан башың сыҡмаҫ. Һынамаған, тәжрибә ҡылмаған мал менән һатыу итмә; үҙеңдән өйрәнгән сауҙанды ташлама.

### Һикһән беренсе тәрбиә

Эй уғыл, "Ғәдүвун ғәҡыл хәйрун мин садикин жаһил" (аҡыллы дошман иҫәр дуҫтан хәйерлерәк мәғәнәһендә). Ахмаҡ үә наҙан әҙәм дуҫлыҡҡа үә дошманлыҡҡа ярамаҫ. Үә һөнәрһеҙ кеше дуҫлыҡҡа ярамаҫ. Һаҡлан шул кешенән, үҙе бер нәмә белмәҫ, үҙен ғалим үә белдекле һанар. Бер эште бер мәртәбә эшләп тоғро килмәһә, икенсе мәртәбә ул эшкә тотонма, үә ҡулындан килмәгән эшкә тотонма.

### Һикһән икенсе тәрбиә

Эй уғыл, гәрсә тоғро һөйләмәк әселер, әммә барыбер тоғро һөйлә. Әгәр дошман серемде белмәнен тиһәң, дуҫыңа ла серенде әйтмә, дошманыңа барып әйтмәнен. Ололарҙы оло ит, кеселәргә шәфҡәтле бул. Наҙан үә һөнәрһеҙ кешеләрҙе терегә һанама, мәйет тип бел. Бер эште ике мәртәбә эшләмә.

### Һикһән өсөнсө тәрбиә

Эшлекһеҙ кешенең икмәген ашауҙан ас тормаҡ артыҡтыр. Һынамаған үә тәжрибә ҡылмаған кешегә таянма, мең тәрлә түбәнселектәр ҡылһа ла. Үҙеңдән түбән дәрәжәләгеләргә мохтаж булыуҙан бик һаҡлан, бынан ҡыйын эш юҡтыр. Бурыстан бик һаҡлан, эй уғыл, кешегә бурыслы булдың иһә - уға ҡол булдың.

(Дауамы бар).

"Дәғүәт" нәшриәте.